# Мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхләки-ватансылыҡ тәрбиәһе биреү

Үҫеп килгән быуынға патриотик тәрбиә биреү – бөгөнгө көндә иң актуаль бурыстарҙың береһе.  Һуңғы йылдарҙа беҙҙең илдә ҙур үҙгәрештәр булды. Был беҙҙең әхләки ҡиммәттәребеҙгә,беҙҙең тарихи ваҡиғаларға мөнәсәбәтебеҙгә ҡағыла. Балаларҙың ильөйәрлек,изгелеклек,киң күңеллелек тураһында ҡараштары боҙолған.

Бөгөнгө көндә рух ҡиммәттәренә ҡарағанда,матди ҡиммәттәр өҫтөнлөк итә. Ләкин был ҡаршылыҡтар,ватансылыҡ тәрбиә биреүҙең туҡтатылыу сәбәбе булырға тейеш түгел.

Әхләки-ватансылыҡ тәрбиә биреүҙе төрөлө сәбәбтәр буйынса, иң ауыр йүнәлештәрҙең береһе тип һанарға мөмкин сөнки :

- Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың йәш үҙенсәлектәре;
- Хәҙере донъяла «ильөйәрлек» төшөнсәһенең күп мәғәнәле булыуы ;
- Теоретик һәм методик ҡулланмаларҙың консепцияһы булмауы;

Мәктәпкәсә йәшәтәге бала үҙен уратып алған ысын барлыҡты хисле ҡабул итеүен иҫәпкә алырға кәрәк , шуға ла уның тыуған ҡалаһына ,иленә булған ватансылыҡ тойғолары,үҙенең ҡалаһы, иле менән һоҡланыу хистәрендә сағыла .Былдай тойғолар,бер нисә дәрестән һуң тыуыуы мөмкин түгел . Был балаға оҙайлы,системалы,маҡсатлы йоғонто яһау һөҙөмтәһе.

Тыуған илгә булған һөйөү бала саҡтан, әкиәт китабтарындағы булған һүрәттәрҙән,әсәйҙең йырынан,йәшәгән йырҙан формалаша башлай.

В.А.Сухомлинский әйтеүе буйынса : «Уратып алған донъяны ҡабул итмәйенсә,тыуған ил тойғоларын һәм башҡа кисерештәрҙе аңларға булмай. Сабыйҙың йөрәгендә,бөтөн ғүмере буйына етәрлек, алыҫ бала саҡтағы тормошо тураһында,бәләкәй мөйөштә хәтирәләре булһын. Был мөйөш менән бөйөк тыуған ил хәтирәләре бәйле булһын».

**Ватансылыҡ тойғолары формалашыуының структураһы**

Ғаилә - Балалар баҡсаһы – Тыуған урам,район – Тыуған ҡала – Тыуған ил,уның баш ҡалаһы, символикаһы – Хоҡуҡ һәм бурыстар. Конституция.

**Мәктәпкәсә йәштәге балаларға ватансылыҡ тәрбиәһе биреүҙең йөкмәткеһе**:

- Балаларҙы мәҙәни мираҫҡа,байрамдарға,йолаларға,халыҡ ауыҙ-тел ижадына,халыҡ биҙәү-ҡулланма сәнғәтенә,музыкаль фольклорға,халыҡ уйындарына ылыҡтырыу ;
- Ғаиләһе,уның тарихы,туғандары,ғаилә йолалары менән танышыу,балалар баҡсаһы,ундағы балалар,өлкәндәр,уйынсыҡтар,уйындар,йолалар менән танышыу;уның ҡалаһы,ауылы,уның тарихы,гербы,йолалары,арҙаҡлы шәхестәре,ҡаҙаныштары менән танышыу тора;
- Төрлө йыл миҙгелендә объекттың торошон күҙәтеү өсөн,маҡсатлы күҙәтеүҙәр үткәреү,сезонға ҡарата тәбиғәттә хеҙмәт төрҙәре ойоштороу,сәскәләр,йәшелсәләр,ағастар,ҡыуыҡтар сәсеү һ.б тора.
- Ижади, танып-белеү,уйын эшмәкәрлектәрен һәр сезонға ярашлы,кешеләргә,хайуандарға,үсемлектәргә ҡарата хәстәрлекле,ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер итерлек итеп ойоштороуҙа тора;

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа ватансылыҡ тойғолары тәрбиәләүҙә һөҙөмтәле эш өсөн, ошондай педагогик шарттар булыуы мөһим :

Балалар баҡсаһы тәрбиәселәре ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнештә булыуы;тәрбиәләнеүселәрҙең ғаиләләре менән үҙ-ара ышаныслы мөнәсәбәттә булыуында,ата-әсәләрҙе психологтк-педагогик мәғлүмәт менән тәьмин итеүҙә;уларҙың балалары менән аралашыу ысулдарын өйрәтеүҙән;балаларҙың,ата-әсәләрҙең һәм тәрбиәселәрҙең даими бәйләнешен тәьмин итеүҙә; ғаилә ағзаларын белем биреү эшмәкәрлегенә йәлеп итеүҙә;ата-әсәләр менән берлектә үҫтереүсе мөхитте булдырыуҙа сағыла.

Ватансылыҡ тойғоларының формалашыу процессында педагогтың юғары компетентлы,ҡуйылған талаптарына ирешә алырлыҡ профессионал булыуын күҙаллай.

Рухи-әхләки тәрбиә биреү баланы һәр яҡлап үҫтереүҙә,айырылғыһыҙ өлөшө,ватан мәҙәниәтен тергеҙеүҙә тәү шарттарҙың береһе булып тора;

Балалар баҡсаһында рухи-әхләки тәрбиә биреүҙең йөкмәткеһе баланың көндәлек тормошона,уның бөтөн эшмәкәрлек төрҙәренә,мәктәпкәсә белем биреү методикаһына,интеграцияһы,сифатлы яңы баҫҡыс тип һанала.

Рухи-әхләки тәрбиә биреү маҡсаты :

Тормошҡа әүҙем ҡарашлы булырлыҡ итеп,кешеләр менән үҙ-ара гармониялы аралаша алырлыҡ,рухи-әхләки шәхес булдырыу өсөн нигеҙ һалыу.

Балаларҙа,мәрхәмәтлек,шәфҡәтлелек,ғәфү итә белеү,мохтаждарға ярҙам итә белеү теләге,сабыр булыу,бөтәһенә ҡарата тыныс мөнәсәбәттә булыу теләге тәрбиәләү.

Башҡалар өсөн һүҙҙә генә түгел, ә эштә үрнәк булырға өйрәтеү,яуызлыҡтан,көнсөллөк тойғоһонан ҡасырға,булғанына ҡәнәғәт булырға,намыҫлы эш итергә,бер ваҡытта ла үҙеңә теләмәгәнде,бүтән кешеләргә эшләмәҫкә өйрәтеү.

Бурыстар:

-Төрлө быуынды бәйләүсе ватансылыҡ тойғолары тәрбиәләү;

-Нәфис зауыҡҡа камиллаштырыу, һәр баланың ижади потенциалын үҫтереү;

-Әҙәби-ижади телмәрҙәрен үҫтереү, һүҙле запасын байытыу;

-Рухи-әхләки тойғолары,хөрмәтләү,изгелеклек,кешелеклек,берҙәмлелек тойғолары тәрбиәләү;

Йөкмәткеһе :

Балалар баҡсаһында рухи-әхләки тәрбиә биреү өсөн төрлө иртәлектәр үткәрергә мөмкин : Көҙ миҙгелендә – “Сөмбәлә килде беҙгә”, “Халыҡтар берҙәмлеге көнө”, ҡыш миҙгелендә – «Яңы йыл», «Ватанды һаҡлауслар көнө», һ.б, Яҙ миҙгелендә – «Ҡар һыуына барыу», «Ҡарға бутҡаһы», «Бер кемдә,бер нимә лә онотолмай» һ.б,Йәй көнө – «Балаларҙы һаҡлау көнө», «Һабантуй» һ.б